# Остаз

*Закир Шакир улы Шакиров — тарихсы, оҫта педагог, улай ғына ла түгел, халыҡ уҡытыусыһы. Ул башҡорт телендә тәүге туған тел дәреслектәрен ижад итә һәм башҡорт яҙма теленең заманса нормаларын булдырыуҙа ҡатнаша. Халыҡ мәғарифын ойоштороусыларҙың береһе, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре исеменә лайыҡ була, Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнә.*


*Закир Шакир улы Шакиров*

Закир Шакиров 1881 йылдың 3 (16) ноябрендә Өфө губернаһы Өфө өйәҙе (бөгөн Башҡортостандың Кушнаренко районы) Ҡарасайылға ауылында тыуған. Закирҙың атаһы Шакир милләте буйынса башҡорт, хәҙерге Борай районы Иҫке Тажи ауылында 1850 йылда тыуған. Заманы өсөн белемле, алдынғы ҡарашлы кеше, Ҡарасайылға ауылы мәҙрәсәһендә балалар уҡытҡан, мулла булған. Уның ҙур һәм татыу ғаиләһендә ете ул һәм бер ҡыҙ үҫкән. Был ихтирамлы кешенең тормошо тураһында мәғлүмәттәр күп һаҡланмаған. Әммә уның нәҫел-нәсәбендә бер иҫтәлекте быуындан-быуынға һөйләп йөрөтәләр.

...Үткән быуаттың 20-се йылдарында был яҡтарҙа йотлоҡ һәм ваба сире аяуһыҙ хөкөм һөрә. Көндәрҙән бер көндө Шакир муллаға үлем түшәгендә ятҡан дуҫының үтенесен еткерәләр. Ул үҙен теге донъяға мосолман йолаһы буйынса ясин уҡып оҙатыуҙы һорай. Шакир хәҙрәт бурысын урын-еренә еткереп атҡара, әммә үҙе ваба йоҡтороп ҡайта. Ауырыуҙың тәүге билдәләрен тойоу менән аласыҡҡа инеп бикләнә лә, ҡатынына, балаларына эргәһенә инеп йөрөүҙе ҡәтғи тыя, ә үҙе үлгәс, аласыҡты яндырырға ҡуша. Бына шундай моңһоу тарих, әммә бынан Шакир хәҙрәттең ниндәй ихтыярлы һәм күркәм шәхес булыуы айырым-асыҡ күҙ алдына килеп баҫа.

Ныҡышмаллығы, аң-белемгә ынтылышы менән үҙенә тартҡан Закир улына 14 йәш тулғас, Шакир мулла уны Рысмаҡай ауылындағы мәктәпкә

уҡырға бирә. Заманы өсөн алдынғы йәҙҙитселек ысулдары ҡулланған был белем усағында малайҙа уҡытыусы булыу теләге нығый. Ул ғилем эстәүҙе артабан дауам итеү юлдарын эҙләй. Байтаҡ уйланғандан һуң, Ҡазанға ”Мөхәммәҙиә” мәҙрәсәһенә барырға ҡарар итә.

”Мөхәммәҙиә” мәҙрәсәһенең татар, башҡорт һәм башҡа мосолман халыҡтары мәғрифәтендәге әһәмиәте ифрат ҙур. Бында дини белем менән бергә донъяуи ғилемгә лә ҙур иғтибар бирелә, шәкерттәр үҙҙәренең киләсәген халыҡҡа хеҙмәт итеү менән бәйләй. Мәҙрәсәлә башланғыс, урта һәм өлкән синыфтар була. Дин нигеҙҙәренә, ислам ҡанундарына, хәҙистәргә өйрәтеү менән бер рәттән, өлкән синыфтарҙа логика, иҡтисад, философия, тарих дәрестәре бирелә. Мәҙрәсәлә башлыса ниндәйҙер йүнәлештә белгестәр әҙерләү түгел, ә дөйөм белем биреү маҡсаты ҡуйылған. Был уҡыу йортон тамамлаусылар араһынан бик күп яҙыусылар, иҡтисад буйынса белгестәр, уҡытыусылар сыҡҡан.

Шулай итеп, 1898 йылдың сентябрь айында 17 йәшлек Закир Шакиров Ҡазан ҡалаһына килеп төшә. Имтихандарҙы уңышлы тапшырғандан һуң, ул ”Мөхәммәҙиә” шәкерте булып китә. Булмышына хас тырышлыҡ һәм мауығыусанлыҡ менән белем туплай башлай, ғәрәп, төрки, фарсы телдәрен, география, дөйөм тарих, тел ғилеме, педагогика серҙәрен өйрәнә. Рус теленә ҙур иғтибар бирә, программанан тыш айырым дәрестәр ҙә ала.

Шәкерт ижтимағи тормош менән дә ҡыҙыҡһына. ”Ҡазан хәбәрҙәре”, ”Фекер” гәзиттәрен, ”Әл-ғасрел жәдит” (”Яңы быуат”), ”Шура” (”Кәңәш”), ”Аң” журналдарын даими уҡый. Һуңғараҡ Мәскәүҙә нәшер ителгән ”Тәрбиятель әтфаль” (”Бала тәрбиәләү”), Ырымбурҙа сыҡҡан ”Мөғәллим”, Ҡазанда донъя күргән ”Тәрбиә”, ”Мәктәп” журналдары менән танышып бара. Был баҫмаларҙы һанап сығыу ҙа ул осорҙа Ҡазандағы ижтимағи-рухи тормоштоң ниндәй булғанын күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирә.

Рус теле иһә белемгә ынтылған, маҡсатлы башҡорт егете алдында бөткөһөҙ хазинаға — педагогика классиктарының ғилми хеҙмәттәренә һәм нәфис әҙәбиәткә юл аса. Ҡорҙашы Зариф Бәшири үҙенең ”Замандаштар менән осрашыу” китабында яҙғанса, тәбиғәте менән үк тәрбиәсе һәләттәренә эйә булған Закир бындай әҙәбиәткә һабаҡташтарын да йәлеп итә. З.Шакировтың педагогик ҡараштары формалашыуға Ф.Буслаев, К.Ушинский, Н.Корф, В.Вахтерев, Д.Тихомиров кеүек күренекле ғалимдарҙың хеҙмәттәре ҙур йоғонто яһай.

Ҡыҙыҡһыныусан шәкерт үҙе менән бер ҡалала йәшәгән, бер үк һауа һулаған замандашы, танылған тел белгесе, тарихсы, этнограф, математик, педагог Ҡәйүм Насири менән танышырға хыяллана, уның китаптарын йотлоғоп уҡый. Хатта Насириҙың филологиянан алыҫ булған тупраҡ эшкәртеү, аш-һыу әҙерләү серҙәре, ювелир, слесарь һөнәрҙәренә арналған хеҙмәттәре менән дә таныша. Уйламағанда ғына теләген тормошҡа ашырырға форсат тыуа. Мәҙрәсә шәкерттәре Ҡәйүм Насириҙың өйөнә осрашыуға бара. 76 йәшлек ғалим ҡунаҡтарҙы ихлас ҡабул итә, уларҙың уҡыуы, тормош-көнкүреш шарттары хаҡында һораша. Шәкерттәр иһә ғалимдың кәштәләргә һөкланғыс тәртип менән теҙеп

ҡуйылған китаптарын мауығып ҡарай. Ҡәйүм Насири Закирға тәбиғәтте өйрәнеүгә арналған ”Ял ваҡыттарында”, ”География буйынса терминология” йыйынтыҡтарын, ”Иж-Буби” мәҙрәсәһе мөғәллиме Мөхәммәтфәйзи Ғөбәйҙуллиндың ”Ҡыҫҡаса донъя географияһы” тигән дәреслеген бүләк итә.

Артабан да һәләтле шәкерт ғалим янына килеп йөрөй. Насири уға ғәрәп теле менән етди шөғөлләнергә, донъяуи фәндәрҙең нигеҙҙәрен ныҡлап өйрәнергә кәңәш итә. Уның йоғонтоһонда Закир Ҡаһирәлә нәшер ителгән ”Әл-Лива” (”Байраҡ”), Төркиәлә сыҡҡан ”Төрк” гәзиттәрен ентекләп уҡып бара.

XIX быуаттың аҙағы — XX быуат баштарында Ҡазандың төрлө уҡыу йорттарында Өфө губернаһынан һәм башҡа яҡтарҙан байтаҡ ҡына башҡорт йәштәре белем алған. 1896—1902 йылдарҙа З.Шакиров Ҡазан университетының биология факультеты студенттары Хабибрахман Атласов һәм Ғүмәр Ҡыуатов менән аралашып йәшәй. Уларға Ырымбурҙан килгән Сәлихйән Күкләшев та ҡушылып китә. Х.Атласовтың өйөндә йыйылышып, башҡорт, татар халыҡтары өсөн әһәмиәтле мәсьәләләр тураһында фекер алышып ултыра торған булғандар. Уларҙың һәммәһен дә ни рәүешле туған халҡын, европалылар кеүек, прогресс юлына баҫтырырға тигән мәсьәлә тулҡынландыра. Был зыялыларҙың яҙмыштары төрлө, әммә барыһы ла ғүмерҙәренең аҙағына тиклем халыҡ мәнфәғәтенә, мәғрифәтселеккә тоғро ҡалды, шуның менән киләсәк быуындарҙың рәхмәтенә һәм хөрмәтенә лайыҡ булды.

Мәҙрәсәлә уҡыу осоронда Закир Шакиров фарсы телен өйрәнеүгә етди иғтибар бирә. Уны Әбүғәлисина, Ғүмәр Хәйәм кеүек көнсығыш әҙиптәренең әҫәрҙәре мауыҡтыра. Шәреҡ телдәрен һәм мәҙәниәтен белгәне, егәрлелеге, кешеләргә ихлас мөнәсәбәте өсөн уны уҡытыусылар ҙа, шәкерттәр ҙә ихтирам итә. 1902 йылда, юғары синыфта уҡыуын дауам итеү менән бергә, Закир Шакир улы түбәнге синыфта мөғәллим ярҙамсыһы булып эшләй башлай, ә артабан урта синыфтарҙа туған тел һәм әҙәбиәт буйынса үҙаллы дәрестәр бирә. Шул рәүешле уның уҡытыусы булыу хыялы тормошҡа аша.

Тап ошо осорҙа ул киләсәктә ҙур шағир булып таныласаҡ Мәжит Ғафури менән аралаша башлай. Ғафури ”Мөхәммәҙиә”гә килгәнгә тиклем үк бер нисә әҫәрен баҫтырып өлгөрә. Был мәҙрәсәгә йәш әҙипте киң донъяуи белем алыу теләге әйҙәп килтерә. Закир уның һәр яңы әҫәре менән танышып бара, яҙыусыға ҙур киләсәк юрай. Улар 1915 йылдарҙа, инде икеһе лә Өфөлә саҡта, яңынан аралаша башлай. Был дуҫлыҡ 1934 йылға, халыҡ шағирының вафатына тиклем дауам итә.

Белемен туҡтауһыҙ камиллаштырыу, эшендә алдынғы ысулдарҙы ҡулланыу, үҙ һөнәренә мөкиббән бирелгәнлек, уҡыусыларға дәресте ҙур сабырлыҡ менән, аңлайышлы итеп бирә белеү ҡеүәһе тиҙ арала йәш мөғәллимде һәләтле педагог булараҡ таныта. Ошо осорҙа Закир Шакиров бөйөк Туҡай менән дә танышыу бәхетенә өлгәшә. Улар тәүге тапҡыр 1907 йылда ”Әл-Ислах” гәзитендә осраша. Туҡай ул мәлдә баҫманың әҙәбиәт бүлеген алып бара. Был хаҡта, оҙаҡ йылдарҙан һуң, З.Шакиров үҙе былай тип хәтерләй: ”Ғабдулла буйға бик ҙур түгел,

түңәрәк йөҙлө, ғәжәп үткер һәм аҡыллы ҡарашлы, еңел һәм етеҙ хәрәкәтле ине. Уның ҡиәфәтенән, үҙен тотошонан, йәшенә ҡарағанда күпкә аҡыллы, бары тик уға ғына хас шәхсиәткә эйә егеттең бөйөклөгө күҙгә ташланып тора ине".

Туҡай менән әҙәбиәт, сәнғәт, уларҙың халыҡты мәҙәни ағартыуҙағы әһәмиәте хаҡында йыш әңгәмәләшәләр. Шағирҙың тәрбиә хаҡындағы фекерҙәре йәш ғалимға ҙур йоғонто яһай. Ә Туҡай иһә яңы танышында хыялында йөрөткән уҡытыусы идеалын күрә, уның мәҙрәсә, хәлфәләр, шәкерттәр тураһында һөйләгәндәрен ҡыҙыҡһынып тыңлай. З.Шакировтың мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы туған тел аша тәрбиәләүҙең мөһимлеге, халыҡ өсөн донъяуи ғилемдең әһәмиәте тураһындағы фекерҙәрен хуплап, Туҡай уға гәзит-журналдарҙа йышыраҡ сығыш яһарға кәңәш итә.

Берҙән-бер көндө йәш хәлфәнең география дәрестәрен уҡытыу алымдары хаҡында бик күп ишеткән Туҡай дәрескә килеү теләген белдерә. Туҡай дәрес буйы диапозитивтар, проекция фонаре һәм башҡа ҡулланыу аппараттары ярҙамында шәкерттәргә Камчатка, Сахалин, Корея, Япония хаҡында һөйләгәнде мауығып тыңлап ултыра ла, аҙаҡтан: "Географияны бына нисек өйрәнергә кәрәк икән", — тип һоҡлана.

Ошо осорҙа Закир Шакиров "Шәреҡ" әҙәби клубына йөрөй башлай һәм яҙыусылар Фәтих Әмирхан, Яҡуп Байбурин, "Әл-Ислах" гәзите мөхәррире Вафа Бәхтийәров, Ғәлиасҡар Камал, Фәтих Халиди, Мөхөтдин Ҡорбанғәлиев менән яҡындан таныша.

1909 йылда Ҡазанда Закир Шакировтың "Мохтасар дәреслек рәсемле география" ("География буйынса рәсемле ҡыҫҡаса дәреслек") китабы донъя күрә. География фәне менән оҙаҡ йылдар мауығыуының һәм уны мәктәптә нисек уҡытырға кәрәклеге хаҡындағы уй-фекерҙәренең емеше булған был китап уҡытыусылар тарафынан ифрат юғары баһа алып, 1914 һәм 1917 йылдарҙа ҡабаттан баҫылып сыға. Тәүге уңышы менән ҡанатланған уҡытыусы тарих дәреслеге төҙөүҙә лә көсөн һынап ҡарай. Ул заманда бындай китаптар башлыса ғәрәп теленән тәржемә ителгән була. Ошо йылдарҙа З.Шакиров "Өфө губернаһы типтәрҙәре, кемдәр улар?" тигән фәнни йәһәттән ифрат мөһим хеҙмәт яҙа. Унда Өфө губернаһына ҡыҫҡаса характеристика бирелә, ошонда йәшәгән типтәрҙәрҙең этнографик үҙенсәлеге, тормош-көнкүрештәре һүрәтләнә.

Кәңәшсе-тәрбиәсеһе Н.Катановтың тәкдиме буйынса, йәш ғалим 1912 йылда А.Шанявский исемендәге Мәскәү халыҡ университетының тарих-философия факультетына уҡырға инә. Алдынғы ҡарашлы рус ғалимдары йоғонтоһонда беренсе рус революцияһынан һуң асылған был уҡыу йорто тиҙ арала халыҡ араһында ҙур абруй ҡаҙана. Университетта, ниндәй милләттән булыуына, сәйәси ҡарашына, социаль хәленә, енесенә ҡарамайынса, ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа юғары белем ала алған.

Ошо университетта шағир Сергей Есенин менән бергә уҡыған Д.Семеновский үҙенең хәтирәләрендә былай тип яҙа: "Шанявский университеты ул заманда иң алдынғы уҡыу йорттарының береһе ине. Уҡыу программаһы ифрат киң. Лекцияларҙы Рәсәйҙең иң күренекле ғалим-

дары уҡый. Лекцияларға йөрөү ирекле. Был эшләп уҡыған студенттар өсөн ифрат уңайлы. Былар барыһы ла белемгә сарсап, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йыйылған кешеләрҙе үҙенә ылыҡтыра. Аудиторияларға килеп тулған студенттар араһында кем генә юҡ — затлы кейенгән ҡупшы ханым да, иҫке бишмәтле ауыл егете лә, тыйнаҡ кейенгән курсисткалар, осҡор аҙымлы тау халҡы, латыштар, украиндар, Себерҙән килеүселәр".

З.Шакиров университетта бик тырышып уҡый, бер үк ваҡытта факультетта ойошторолған ҡыҫҡа курстарҙа тел ғилеме буйынса өҫтәлмә шөғөлләнә. Тәрбиә мәсьәләләренә, мәктәптән тыш мәғрифәтселек эшмәкәрлегенә, китапхана эшенә арналған курстарҙа ҡатнашырға ла ваҡыт таба. Күренекле библиографтар М.Покровский менән М.Покровская етәкселегендә А.С.Грибоедов исемендәге китапханала эштең нисек ойошторолоуын өйрәнә.

1915 йылда Закир Шакировҡа дүртенсе курста уҡыуын ҡалдырырға тура килә. Ҡазанда һәм Мәскәүҙә тюркология, ғәрәп һәм фарсы телдәре, география, тарих, философия, логика, дөйөм педагогика буйынса төплө белем алып, уҡытыу тәжрибәһе туплап, ул Өфөгә ҡайтып төшә. Уны губерна земствоһының рус булмаған мәктәптәр бүлегенә инспектор итеп тәғәйенләйҙәр. Земствола уға башҡорт, татар, сыуаш һәм башҡа рус булмаған милләт балаларын мәктәптән тыш уҡытыуҙы ойоштороу, дәреслектәр һәм ҡулланыу әсбаптары әҙерләү өсөн авторҙар коллективы туплау эше йөкмәтелә. Был эште ул бик белеп, үҙенә хас төпсөрлөк һәм яуаплылыҡ менән башҡарып сыға. Шунлыҡтан тиҙ арала уны ошо уҡ бүлектең етәксеһе итеп үрләтәләр. Тиҙҙән З.Шакиров етәкселегендә милли мәктәптәрҙә ҡулланылған дәреслектәргә ентекле анализ яһау өсөн махсус комиссия төҙөлә. Ул Өфө, Ҡазан, Ырымбур, Силәбе, Троицк, Бөрө, Бөгөлмә, Минзәлә ҡалаларынан кәңәшмәгә йыйылған дәреслек авторҙары алдында ентекле доклад менән сығыш яһай. Мәжит Ғафури, Мөхөтдин Ҡорбанғәлиев, Хәсән Ғәли, Ғәлимйән Ибраһимов кеүек күренекле мәғрифәтселәрҙең ҡатнашыуы был йыйынға айырым олпатлыҡ өҫтәй. 1915 йылдың 20 июлендә башланған кәңәшмәлә бер аҙна эсендә алтмыш өс дәреслек, туғыҙ "Әлифба" китабы тикшерелә. Алты география дәреслеге араһынан бары икәүһе — М.Ҡорбанғәлиевтың "Донъя" һәм З.Шакировтың "Мохтасар дәреслек рәсемле география"һы ғына юғары баһаға лайыҡ була.

Земстволағы дәүерендә З.Шакиров административ эшмәкәрлек менән бер рәттән халыҡ педагогикаһы буйынса ғилми-тикшеренеүҙәр алып бара, ғаиләлә бала тәрбиәләү, тәрбиәлә нәфис әҙәбиәттең әһәмиәте мәсьәләләрен өйрәнә, каталогтар, библиографик күрһәтмәләр төҙөй. Ошо осорҙа "Уҡытыусы — ул тәрбиәсе лә" тигән мәҡәләһен яҙа һәм 1914 йылда "Әл-Адәб" ("Әҙәп") журналында баҫтырып сығара. Уның был хеҙмәте артабан тулыландырылып, 1917 йылда Өфөлә "Төрөк-татар халыҡтарында бала тәрбиәһе" тип аталған айырым китап булып донъя күрә.

Революция алдынан Башҡортостанда бер генә юғары уҡыу йорто ла булмай. Мәктәптәрҙә уҡытыусылар етешмәй, булғандарының да махсус әҙерлеге бик түбән кимәлдә була. Төрлө ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан,

З.Шакиров Өфө ҡалаһының 17-се мәктәбендәге танылған уҡытыусы Леонид Петрович Гнеденков, күренекле мәғрифәтсе Шәриф Сүнчәләй, яҙыусылар Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибраһимов һәм башҡалар менән яңыса белем биреү мәктәбе, мосолмандарҙы уҡытыу мәсьәләләрен төрлө йыйындарҙа ҡыйыу һәм ныҡышмал рәүештә күтәреп сыға. Тырышлыҡ бушҡа китмәй. 1917 йылдың 3 ноябрендә Рәсәйҙә беренсе булып мосолман йәштәре өсөн һигеҙ кластыҡ гимназия асыла. Был Башҡортостан мәғарифында ифрат әһәмиәтле ваҡиға була. З.Шакировты ошо гимназияға етәксе итеп тәғәйенләйҙәр, шул уҡ ваҡытта унда бер нисә фәнде лә уҡыта. Һуңғараҡ ул Өфөлә өлкәндәр өсөн гимназия асыу мәсьәләһен дә күтәрә. 1917 йылда ул «Өфө вилайәте географияһы» китабын яҙып өлгөрә.

1919 йылдың июнендә З.Шакировты Өфө губернаһы земство идараһының башҡорт һәм татар халҡы араһында белем таратыу бүлегенә мөдир итеп ҡуялар. Шул уҡ ваҡытта ул үҙе етәкселек иткән гимназияны икенсе баҫҡыс мәктәбенә әйләндереү һәм уҡытыусылар әҙерләү эше менән дә шөғөлләнә. Өҫтәүенә, Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте уға тәүге тапҡыр ойошторолған тыуған яҡ музейына етәкселек итеү бурысын да йөкмәтә.

20-се йылдар башында башҡорт алфавитын һәм орфографияһын эшләү зарурлығы тыуа. Шуға бәйле Башҡортостан Хөкүмәте янында башҡорт теленең яҙма формаһын ғәмәлгә индереү буйынса махсус комиссия төҙөлә. Уға Шәһит Хоҙайбирҙин етәкселек итә. Реформаланған ғәрәп графикаһы нигеҙендә башҡорт яҙмаһын булдырыу һәм башҡорт әҙәби телен ғәмәлгә индереү эшенә Закир Шакиров күп көс һала. Туған теленең, тарихының, халыҡтың ауыҙ-тел ижады һәм этнографияһының белгесе булараҡ, ғалим Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте тарафынан ойошторолған экспедицияларҙа ҡатнаша. Һөҙөмтәлә, матбуғатта уның ”Тюркологияның хәҙерге хәле, уны киләсәктә үҫтереү юлдары”, ”Башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы, башҡорттар һәм татарҙар үҙҙәре нимә эшләгәндәр?” тигән мәҡәләләре донъя күрә. Был мәҡәләләрҙең йөкмәткеләре, унда күтәрелгән мәсьәләләр ул осорҙағы тюркология фәненә тәнҡитле баһа бирерлек ҡыйыулыҡҡа эйә булған фекерле ғалим формалашып килеүен күрһәтә. Уларҙа фәнде артабан үҫтереү буйынса тәҡдимдәр ҙә килтерелә. Был хеҙмәттәрендә ул үҙенә аралашыу бәхете тейгән күренекле ғалимдар Н.Катанов, В.Богородский, В.Бартольд, В.Гордлевский, С.Ольденбург, С.Малов һәм Н.Дмитриевтарҙың фекерҙәренә таяна. Уның ”Мәхмүд әл-Ҡашғариҙың ”Китаб дивану лөғәт әт-төрк” исемле әҫәре” тигән хеҙмәте айырыуса әһәмиәтле була.

1926 йылдың февралендә ул тюркологтарҙың СССР-ҙа йәшәгән төрки телле халыҡтарҙың яҙмаһын латин графикаһына күсереү мәсьәләһен ҡараған съезында ҡатнаша. Рус телендә яҙылған ”Тюркология съезы айҡанлы” тигән мәҡәләһендә ғалим яңы әлифкә күсеүҙең маҡсатҡа ярашлы булыуын, орфографияның фонетик принципҡа ҡоролоуын яҙып сыға.

1927 йылда ”Яңы әлифба” буйынса ойошторолған комитеттың тәүге ултырышы була. Унда Хафиз Ҡушаев, Ғамил Ҡасимов, Ғөбәй Дәүләтшин,

Ғабдулла Амантай, Имай Насири, Төхфәт Йәнәби, Зәйни Хәбиби һәм Закир Шакировтар ҡатнаша. Проблеманы һәр йәһәттән ентекләп өйрәнгәндән һуң, башҡорт яҙмаһын латин алфавитына күсерергә ҡарар итеFлә. 1928 йылдың 7 майында Башҡортостан Үҙәк башҡарма комитеты декреты менән яңы алфавит дәүләт статусы ала. Башҡорт АССР-ының 7-се съезында латин алфавитына күсеү тураһында ҡарар ҡабул ителә һәм 1930 йылда ул тормошҡа ашырыла башлай.

Закир Шакиров башҡорт тел ғилеменең инешендә тора, республикала башҡорт теле буйынса тәүге программалар, дәреслектәр төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. Әле 1924 йылда уҡ уның урыҫтар өсөн "Башҡорт теле дәрестәре", ике йылдан "Урыҫтар өсөн ғәмәли башҡорт теле дәреслеге" китаптары донъя күрә. Артабан да йыл һайын тиерлек уның ҡатнашлығында төҙөлгән дәреслектәр һәм уҡыу ҡулланмалары сығып тора. Айырыуса Шәриф Чураев менән берлектә төҙөлгән урыҫтар өсөн башҡорт теле дәреслеге иғтибарға лайыҡ. Ул З.Шакиров тарафынан яҙылған "Өндәр һәм уларҙы әйтеү тураһында" тигән инеш менән башлана. Был, ғәмәлдә, башҡорт теленең өндәр составына арналған ҙур булмаған, әммә бик етди ғилми хеҙмәт булып тора. Шулай уҡ был дәреслектә башҡорт теленең лексикографияһы, грамматик категориялары менән бәйле мәсьәләләр ҙә ҡарала. Текстар тематик принциптан сығып эшләнгән һәм, белгестәр билдәләүенсә, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерергә тейеш булған. Уларҙы яҙыуға тәжрибәле лингвист күп көс һалған. Был дәреслектәр башҡорт теленең мәктәп курсын эшләү һәм ғилми грамматика буйынса етди тикшеренеүҙәрҙең шул осорҙа ныҡлап башланыуын раҫлаған миҫалдарҙың береһе. Нәҡ З.Ш.Шакировтың "Башҡорт теле дәреслеге", "Ғәмәли башҡорт теле дәреслеге", "Башҡорт теленән эш китабы", "Тел терминдары" китаптары башҡорт яҙма теленең заманса нормалары нигеҙҙәрен тәшкил итә һәм артабанғы үҫешен билдәләй. Уларҙың тарихи әһәмиәте лә шунда һәм быны башҡорт теленең тәүге ғилми грамматикаһы авторы, күренекле телсе Николай Константинович Дмитриевтың Шакировҡа биргән баһаһы ла раҫлай. 1928 йылда З.Шакировҡа Мәғариф Геройы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Милләттең Ғабдулла Амантай, Ғәббәс Дәүләтшин, Вәли Хангилдин кеүек зыялылары менән бергә Закир Шакиров башҡорт халҡының тарихын, иҡтисадын, мәҙәниәтен, этнографияһын һәм телен өйрәнеү буйынса ҙур эш алып бара. Уның етәкселегендә 1929 йылдың майында бер төркөм башҡорт ғалимдары башҡорт һөйләш телен, фольклорын өйрәнеү маҡсаты менән Силәбе өлкәһенең Арғаяш районына экспедицияға сыға. Был сәйәхәттең һөҙөмтәләре 1930 йылда "Белем" журналында донъя күрә.

1928—1932 йылдарҙа З.Шакиров СССР Фәндәр академияһы ойоштороған фольклорсылар һәм лингвистар экспедицияһында ҡатнаша. Мәҫәлән, Закир Шакир улы үҙе Баймаҡ районы Туҡтағол ауылында Абдрахман Үҙәнбаев менән осрашып, "Ҡараташ аҫты суҡ муйыл", "Ирәндек", "Төйәләҫ", "Ғилмияза", "Сибай", "Баяс", "Аҡ яурын — сал бөркөт", "Бейеш", "Һаҡмар", "Наволихин" һәм башҡа халыҡ йырҙарының һүҙҙәрен

һәм легендаларын яҙып ала, көйө фонографҡа яҙыла. Көйҙәрҙе аҙаҡ композитор Камил Рәхимов нотаға һала. Ошо экспедиция һөҙөмтәһендә 400-гә яҡын йыр яҙып алынып, ифрат ҙур эш башҡарыла.

З.Шакиров оҙаҡ йылдар мәшһүр Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормошон һәм ижадын өйрәнә. Бының һөҙөмтәһе булараҡ, 1947 йылда "Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ҡыҫҡаса биографияһы" тигән хеҙмәт яҙыла. Тынғыһыҙ ғалим шулай уҡ һүҙлектәр төҙөү эшенең дә уртаһында ҡайнай. Ул үҫемлектәр атамалары буйынса русса-башҡортса һүҙлек, химия, математика, лингвистик терминдар буйынса һүҙлектәр төҙөүселәрҙең береһе була. Шулай уҡ 1948 йылда баҫылып сыҡҡан беренсе ҙур русса-башҡортса һүҙлек төҙөүҙә лә ҡатнаша.

1930 йылда З.Шакиров Башҡорт педагогия институтында (1957 йылдан алып Башҡорт дәүләт университеты) уҡыта башлай. Бында ул, дөйөм алғанда, 40 йылға яҡын эшләй. Ошо осоро уҡытыусы-мәғрифәтсе өсөн ғилми тикшеренеүҙәр йәһәтенән иң емешле булды, тип әйтергә мөмкин. Тап шул йылдарҙа З.Шакиров башҡорт әҙәби теленең фәнни терминологияһын эшләүгә күп көс һала, улар артабан мәктәп дәреслектәренә инеп китә.

Педагогия институтында тәүге йылдарҙа Закир Шакиров иҫке төрки, ғәрәп, фарсы телдәрен дә уҡыта, әммә оҙаҡламай ул дәрестәр программанан алына. Закир Шакир улы быға ҡаршы була һәм телселәр, әҙәбиәтселәр, айырыуса яҙыусылар, ул телдәрҙе мотлаҡ белергә тейеш, кире осраҡта иһә беҙ элекке әҙәби-мәҙәни мираҫтан айырылып ҡаласаҡбыҙ, тип иҫәпләй. Шул уҡ йылдарҙа З.Шакиров Аҡмулла ижадын тергеҙеү буйынса ҙур эш башҡара. 1931 йылда ул хәҙерге Ҡурған өлкәһе Ғәйет Ялан ауылында мәғрифәтсе-шағирҙың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" шиғыры яҙылған сығанаҡты табыуға өлгәшә.

Күренекле ғалим һәм педагог уҡытыусыларҙы әҙерләгәндә методикаға ҙур әһәмиәт бирә. Үҙенең хеҙмәттәрендә "туған телдәрҙе уҡытыуҙың методикаһы — лингвистика, педагогика һәм психология һығымталарына һәм дөйөмләштереүҙәренә нигеҙләнгән фәнни дисциплина", тип ышандырырлыҡ итеп дәлилләй. Ошоға бәйле уның, туған тел уҡытыусылары филология буйынса тәрән белемгә һәм методик мәҙәниәткә эйә булырға тейеш, тигән һүҙҙәре бик әһәмиәтле.

З.Шакировтың методика буйынса алдынғы ҡараштары ул рецензенты һәм мөхәррире булған "Башланғыс синыфтарҙағы башҡорт теле уҡытыу методикаһы" тигән китапҡа инеш мәҡәләһендә асыҡ сағыла. Ул К.Ушинскийҙың: "Мәктәптә уҡыуҙың тәүге көндәренән үк уҡытыусы баланы туған телдең гүзәл донъяһына алып инергә тейеш. Баланың шәхесе туранан-тура туған тел аша формалаша", — тигән һүҙҙәрен миҫалға килтерә. Бөйөк педагогтың был фекеренә мөрәжәғәт итеү осраҡлы түгел, Закир Шакиров балаларҙы бәләкәй генә сағынан уҡ туған тел аша тәрбиәләүҙең әһәмиәтенә ҡайта-ҡайта иғтибарҙы йүнәлтә. "Тыуған илде, халыҡты, хеҙмәтте яратыу балаға туған тел, халыҡ йырҙары, туған әҙәбиәт аша һеңә. Телдә бик күп фәлсәфәүи төшөнсәләр, ғәжәйеп матур шиғри формалар бар. Тел кеше тормошоноң бөтә яҡтарын да сағылдыра, туған тел дәрестәре һүҙ байлығын арттыра,

фекерҙе матур итеп әйтеп бирергә өйрәтә. Шуға күрә уҡытыусылар туған телдең мөһимлеген мотлаҡ аңларға тейеш", — тип яҙа һәм башҡорт телен башланғыс синыфтарҙан уҡ уҡытыуға айырыуса етди ҡарай.

Закир Шакировтың туған тел уҡытыусыларына ҡуйған талаптарының дөрөҫлөгөн бөгөнгө педагогика фәне лә инҡар итмәй, ғалимдар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә уға һылтана, унан цитаталар килтерә. Ул туған тел уҡытыусыһы мотлаҡ методист та булырға, уҡытыу алымдарын даими камиллаштырырға, әсә телен уҡытыуҙы тәрбиә менән бәйләргә, уҡыусыларҙың үҙаллы эштәрен дөйөм эш менән аралаштырып алып барырға, тел ҡағиҙәләрен йәнле һөйләү теле миҫалында аңлатырға тәҡдим итә, туған тел уҡытыуҙы башҡа фәндәр менән бәйләп алып барыуҙы хуплай. Ошондай талаптар "Урыҫ мәктәбендә башҡорт теле уҡытыу тураһында методик төшөнсәләр" тигән ҡулланманың нигеҙенә һалынған. Тәжрибәле педагог һәм лингвист юғары уҡыу йортонда студенттарҙы мәктәп дәреслектәрендә һәм программаларында һалынған принциптарҙы иҫәпкә алып уҡыта. Шунлыҡтан ул әҙерләгән уҡытыусыларға артабан мәктәптә уңышлы эшләп алып китеү еңелгә тура килә. Университеттың башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһында аспирантура асыуға ла өлгәшә ул. 1944 йылда эшләй башлаған аспирантурала Х.Зиннәтуллина менән Б.Мәғәсүмова тәүге аспиранттар була.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында университет уҡытыусыларының күбеһе фронтҡа киткәс, Закир Шакиров хеҙмәттәштәре Усман Хөсни, Хәнифә Зиннәтуллина, Бәһиә Мәғәсүмовалар менән бергә, тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ тойоп, уҡытыусылар әҙерләү эшен дауам итә.

Фәнни-педагогика өлкәһендә оҙаҡ йылдар уңышлы эшләгәне өсөн хөкүмәт уны 1944 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлай һәм ул республикала беренсе булып БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән хөрмәтле исемгә лайыҡ була.

1942—1944 йылдарҙа Өфөлә бер төркөм күренекле ғалимдар эвакуацияла йәшәй. Улар араһында СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, филолог Леонид Арсеньевич Булаховский ҙа була. Закир Шакиров уға һәр яҡлап ярҙам күрһәтә һәм ғалимдың үтенесе буйынса, башҡорт телен өйрәтә.

1951 йылда Башҡортостандың педагогик йәмәғәтселеге тантаналы шарттарҙа мәғрифәтсе-ғалимдың 70 йәшен билдәләй. 1954 йылда ул Ленин ордены менән наградлана. Хаҡлы ялға сыҡһа ла, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем университет студенттарына иҫке төрки телен өйрәтә, киләсәктә телсе-ғалимдар булып китәсәк йәш хеҙмәттәштәренә боронғо әҙәби ҡомартҡыларҙы уҡырға ярҙам итә. Закир Шакир улы Шакиров 1970 йылдың 12 декабрендә вафат була.

Тюркология даирәһендә күренекле белгес, халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен ифрат нескә тойған зыялы шәхес Закир Шакиров башҡорт филология фәненең инешендә торҙо һәм ғүмере буйы ысын мәғәнәһендә Уҡытыусы, Остаз булып ҡалды.

*Рифхәт Шакировтың "Линия жизни" китабы буйынса*
*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА әҙерләне.*